**ЗАДАНИЯ**
**На отборочный этап Акмуллинской олимпиады по башкирскому языку и литературе для учащихся 10-11 классов и студентов СПО 2022-2023 уч. год.**

1. **Түбәндәге  һүҙҙәр телдең ниндәй функциональ стиленә ҡарай:** ***һыпыртты, тығынды,  быжғытты, бупылданы, бәлшәйҙе, иҫәүән*****:**
Рәсми стилгә
Фәнни стилгә
Публицистик стилгә
Йәнле һөйләү стиленә

2. **Рәсми стилгә ҡараған һүҙ һәм һүҙбәйләнештәрҙе табығыҙ:**
Бәхетле ғүмер, белем усағы, файҙалы  кәңәш, һыбайлы егеттәр
Мәжбүр, яуаплы, хоҡуҡлы, килешеү нигеҙендә, әйтелгәндәрҙән сығып
Үтенеп һорайым, тәрән уйҙар, бәхәсле мәсьәләләр

**3. Яҙылыштары бер төрлө, яңғырашы икенсе төрлө булған һүҙҙәргә .........тип әйтәләр:**
.....омографтар....
......омофондар
......дөрөҫ яуап юҡ

**4. Түбәндә ғәрәп теленән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙе табығыҙ?**
Баҙар, иҡтисад, карауат, мискә, дүшәмбе
Китап, мәктәп, ғаилә, сәйәсәт, мәҙәниәт
Автобус, эләүкә, тауар, кәнфит, биҙрә

**5.** Түбәндәге шиғыр юлдарында һүрәтләү сараларының ҡайһы төрө ҡулланылған?
**Йосоп күңелендә**
**Уйҙар тыуа**
**Уйҙар ҡуба**
**Уйҙар ташҡына. (Р. Ниғмәти):**
Эпитет
Метонимия
Метафора
Дөрөҫ яуап юҡ

**6. «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосында ниндәй осор ваҡиғалары һүрәтләнә?:**
XVIII-XIX быуат ваҡиғалары
XIV-XV быуат ваҡиғалары
XV-XVI быуат ваҡиғалары
Дөрөҫ яуап юҡ

**7. Очерк, фельетон, мәҡәлә, доклад функциональ стилдең ниндәй төрөнә ҡарай:**
Матур әҙәбиәт стиленә
Фәнни стилгә
Публицистик стилгә
Йәнле һөйләү стиленә

**8. Башҡорт әҙәби телендә нисә диалект бар?**
3 диалект: көньяҡ, көнсығыш, төньяҡ-көнбайыш

2 дилект: көньяҡ, төньяҡ-көнбайыш
4 дилект: көньяҡ, төньяҡ-көнбайыш, төньяҡ, көньяҡ-көнсығыш

**9. Башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалектына ҡараған һүҙҙәрҙе билдәләгеҙ?**
Аттайым, барың әле, ятҡыз, ҫимеҙ
Ултырың, ятҡыз, барасыз, ҡызлар
Ҡыҙҙар, урманнан, туҡҫан

10. **Ҡайһы һүҙгә килеш ялғауы дөрөҫ ҡушылған?**
Красноусольскиҙан
июньдән
Донбассҡа
кафелә

**11. Башҡорт теле ниндәй телдәр ғаиләһенә ҡарай?**
Төрки телдәр ғаиләһенә
Һинд-европа телдәр ғаиләһенә
Дөрөҫ яуап юҡ

**12. «Аҡыллы ҡуйҙым, иҫәр .......... тиәр» мәҡәлендә төшөп ҡалған һүҙе яҙ:**
ҡуйманым
туйҙым
ендем

**13. Башҡорт теле ниндәй телдәр менән ҡәрҙәш тел тип һанала:**
Татар, ҡаҙаҡ, төрөк, әзербайжан
Татар, ғәрәп, төрөк, төркмән
Татар, сыуаш, фарсы, таджик

**14. М. Өмөтбаевтың «Ҡайыш илә йүкә» әҫәре ниндәй жанрға ҡарай?**
Мәҫәл
Повесть
Шиғыр

**15. Һуҙынҡы өндәрҙең телмәр ағышында ҡыҫырыҡлап сығарылыуы нисек атала?**
Редукция
Протеза
Элизия
Эпентеза

**16. «Бәхетһеҙ ҡыҙ» әҫәренең авторы кем?**
З. Һаҙи
Р.Фәхретдинов
М. Аҡмулла
М. Ғафури

**17. «Үрмәкселәр үргән <u>аҡ уҡаны</u> Ялтырата әбей сыуағы”. Аҫтына һыҙылған һүҙҙәр һөйләмдең ниндәй киҫәге булып килә?**
тултырыусы һәм аныҡлаусы
эйә һәм хәбәр

аныҡлаусы һәм тултырыусы
аныҡлаусы һәм аныҡлаусы

**18. «Эш ………..ярата» мәҡәләндә төшөп ҡалған һүҙҙе билдәлә:**
матурҙы
иплене
мине
ялҡауҙы

**19. «Әсә күңеле балала, бала күңеле ………» – мәҡәлде артабан дауам ит:**
ҡалала
атала
далала

**20. «Атты айһыҙ маҡтама» мәҡәленең һөйләм төҙөлөшөн билдәлә:**
атама һөйләм
ике составлы йыйнаҡ һөйләм
дөйөм эйәле һөйләм
дөрөҫ яуап юҡ

**21. «Ағас телле» фразеологизмы ниндәй мәғәнәне аңлата?**
юҡ-бар һүҙ, ғәйбәт һөйләүҙе
күп һөйләүҙе
тупаҫ һөйләшә торған, тупаҫ телле кешегә әйтелә
башҡортса һөйләшә белмәгән кешегә әйтелә

**22. «Өмөтһөҙ – шайтан» - был ниндәй синтаксик берәмек?**
фразеологик берәмек
мәҡәл
ябай һүҙбәйләнеш

**23. Этнонимика – тел ғилеменең ....**
географик объекттарын, ер-һыу атамаларын өйрәнеүсе бүлеге
хайуан атамаларын һәм уларға бирелгән яңғыҙлыҡ исемдәрен өйрәнеүсе бүлеге
ырыу, ҡәбилә исемдәрен, этнонимдарҙы өйрәнеүсе бүлеге

**24. «Аяҙытып ебәрҙе. Ер өҫтөн туңаҙытты» (Н. Мусин) Һөйләме бер составлы:**
билдәле эйәле һөйләм
дөйөм эйәле һөйләм
атама һөйләм
эйәһеҙ һөйләм

**25. Кем ул Ризаитдин Фәхретдинов:**
Мәғрифәтсе-педагог
Тарихсы
Яҙыусы
Бөтөн яуаптар ҙа дөрөҫ

**26. «Тимербай ҡурайсы» хикәйәһенең авторы кем?:**
Мәжит Ғафури
Сафуан Яҡшығолов
Закир Һаҙи

Фәтхелҡадир Сөләймәнов

**27. «Ғаилә» һүҙе ниндәй телдән үҙләштерелгән?**
Фарсы теленән
Ғәрәп теленән
Саф башҡорт һүҙе
Рус теленән

**28. Аяҡтарым юлда, күңелем йырҙа, Ерҙә мин бер шундай юламан. Көндөҙ мин – ҡояшҡа, ә төндәрен Йондоҙҙарға ҡарап юл алам. Был шиғыр юлдарының авторы кем?**
Мостай Кәрим
Рәшит Назар
Хәсән Назар
Рәмил Ҡол-Дәүләт

**29. «Беҙ Түбән ос Ҡара .............. китеп барабыҙ» - был һөйләм ниндәй яҙыусының әҫәренән алынған һәм унда ниндәй һүҙ төшөп ҡалған?**
З. Биишеваның «Дуҫ булайыҡ» әҫәренән «Ҡыҙрастарға» һүҙе
Һ. Дәүләтшинаның «Айбикә» әҫәренән «Ҡотлоярҙарға» һүҙе
М. Кәримдең «Оҙон-оҙаҡ бала саҡ» әҫәренән «Йомағолдарға» һүҙе
М. Кәримдең «Беҙҙең өйҙөң йәме» әҫәренән «Йәмилдәргә» һүҙе

**30. А.С. Пушкиндың «Бахчисарайский фонтан» поэмаһын башҡорт теленә кем тәржемә иткән:**
М. Аҡмулла
М. Ғафури
М. Өмөтбаев
С. Яҡшығолов